# БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН

# МОРФОЛОГИК АНАЛИЗ  ЯҺАУ ТӘРТИБЕ

Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы

Исем

Тикшереү тәртибе.
1. Башланғыс формаһы (төп килеш, берлектә).
2. Яңғыҙлыҡ йәки уртаҡлыҡ исем.
3. Яһалышы (тамыр, яһалма, ҡушма).
4. Һаны.
5. Заты.
6. Килеше.
7. Хәбәрлек ялғауы.
8. Һөйләмдең; ниндәй киҫәге булып килгән?

Өлгө. Йондоҙҙар ялтырай. Йондоҙҙар - исем, башланғыс формаһы - йондоҙ, тамыр, уртаҡлыҡ исем, күплектә, төп килештә, һөйләмдә эйә булып килгән. Балаларымды бик яратам. Балаларымды - исем, башланғыс формаһы - бала, тамыр, уртаҡлыҡ исем, күплектә, 1-се затта, төшөм килештә, һөйләмдә тултырыусы булып килгән.

Ҡылым

Тикшереү тәртибе.
1. Ҡылымдың башланғыс формаһы (бойороҡ һөйкәлешендәге тамыр, нигеҙ).
2. Һөйкәлеше (бойороҡ, хәбәр, шарт, теләк).
3. Төркөмсәһе (исем ҡылым, сифат ҡылым, уртаҡ ҡылым, хәл ҡылым).
4. Заман формаһы (үткән, хәҙерге, киләсәк).
5. Заты.
6. Һаны
7. Барлыҡ йәки юҡлығы.
8. Йүнәлеше.
9. Күләме.
10. Рәүешлеге
11. Һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килгән?

Өлгө. Эштән һуң киске эңер ваҡытында, күрше-күлән нигеҙ буйында әңгәмәләшеп ултырғанда, япон батшаһын әрләй - әрләй, сайҡалып был килеп сыҡты.

Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы

Килеп сыҡты - ҡылым, башланғыс формаһы - килеп сыҡ; ҡушма ҡылым, хәбәр һөйкәлеше, хәҙерге заман, 3-сө затта, берлектә, барлыҡта, һөйләмдә хәбәр булып килгән.

Сифат

Тикшереү тәртибе.

1. Сифаттың башланғыс формаһы.
2. Төп йәки шартлы.
3. Яһалышы яғынан: тамыр, яһалма, ҡушма.
2. Сифаттың дәрәжәһе (төп, сағыштырыу, артыҡлыҡ, аҙһытыу).
3. Һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килеүе.

Өлгө. Ҡыҙыҡ инде, өҫтөңә яңы, матур кейем кейгәс, нисектер, күңелең дә бөтәйеп, йәмләнеп киткәндәй була.

Матур (кейем) - сифат, башланғыс формаһы - матур, төп сифат, төп дәрәжәлә, яһалышы яғынан тамыр сифат, һөйләмдә аныҡлаусы булып килгән.

Алмаш

Тикшереү тәртибе.

1. Башланғыс формаһы.
2. Ниндәй һүҙҙе алмаштырған? Ул һүҙ ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?
3. Алмаш төркөмсәһе (зат,күрһәтеү, һорау, билдәләү, билдәһеҙлек, юҡлыҡ, эйәлек).
4. Алмаштың заты, һаны, килеше.
5. Алмаш һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килгән?

Өлгө. Бик күп йылдар үткәс, алыҫ Көнсығыш илдәренең береһендә мин боронғо цирк тамашаһы ҡараным.

Мин - алмаш, зат алмашы, 1-се затта, берлек һанда, төп килештә, һөйләмдә эйә булып килгән.

Һан

Тикшереү тәртибе.

1. Башланғыс формаһы (төп һан).
2. Төҙөлөшө (ябай, ҡушма).
3. Төркөмсәһе(төп, рәт, бүлем, сама, йыйыу, кәсер, үлсәү).
4. Исем урынында килгән һандарҙың эйәлек заты, хәбәрлек заты, килеш, күплек ялғауҙары.

Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы

5. Һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килеүе.
Өлгө. Улар өсөнсө рәттә ултыра ине.
Өсөнсө - һан, башланғыс формаһы - өс, ябай һан, рәт һаны, һөйләмдә аныҡлаусы булып килгән.

<u>Рәүеш</u>
Тикшереү тәртибе.
1. Башланғыс формаһы.
2. Яһалышы (тамыр, яһалма,ҡушма).
3. Рәүеш төркөмсәһе (төп, ваҡыт, урын, оҡшатыу, күләм – дәрәжә, сәбәп-маҡсат).
4. Дәрәжәһе (төп, сағыштырыу, артыҡлыҡ).
5. Һөйләмдең ниндәй киҫәге?
Өлгө. Элек әсәһе эшләй торған эштәрҙе хәҙер инде ул үҙе шәп башҡара. (Х. Мохтар.)
Элек – рәүеш, ваҡыт рәүеше, төп дәрәжә, тамыр рәүеш, һөйләмдә хәл булып килгән.